### 16 июнь — медицина хеҙмәткәрҙәре көнө

*МиЅниса БА№УМАНОВА*

# БАЛАЛАР ҺАУЛЫҒЫ ҺАҒЫНДА

Атлы кырандас күренеү менән малайҙар йәшенгән урындарынан кемуҙарҙан йүгерешеп сыҡты ла һөрән һалды:

— Атай, ҡайт!

— Ҡайт инде, атаҡай!

— Беҙ асыҡтыҡ, атай!

Кырандаста ҡайҡая биреберәк ултырған мыҡты ир дилбегәне бер генә ҡаҡҡайны — ат юртыуын ҡыҙыулатты. Эйәртенешеп йүгергән малайҙарҙың иң бәләкәсе тыны бөтөп сүкәйҙе, береһе абынып аунап ҡалды, иң өлкәне генә һаман ҡалышманы, һаман ялбарҙы: «Ҡайт, атай!»

Ике ҡыҙ, дүрт малайҙың атаһы балаларының ялыныуына ҡолаҡ һалманы. Колхозда бригадир ул. Ҙур кеше! Етмәһә, фронтовик. Һуғыштан ҡайтҡас, әүәлге тракторсыны механизаторҙар бригадиры итеп ҡуйҙылар. Йөрөй ана кырандаста әллә кем булып! Йәшләй тормош ҡорған ҡатынын, алты балаһын ташлап, үҙенән егерме биш йәштәр самаһы кесе һылыуҡай ҡосағына сумды. «Аҙҙарҙың ҡәҙере күп, ҡыҙҙарҙың әҙере күп» заман бит. Бригадирға нимә — үҙе баш, үҙе түш, балаларында ни эш...

Мәгәр Сәмиғулланың алты балаһы үкһеҙ булманы. Мәрхәмәтле, игелекле ҡәрҙәштәребеҙ хәлдәренә инде. Миңзифа апайҙары малайҙарҙы ҡараштлы. Сажиҙә апайҙары һигеҙенсе класта уҡығанда Абзанда дауахана һалалар, ҡыҙыҡай каникул ваҡыттарында шунда эшләп ала. Сибек кенә ҡыҙ икенсе ҡатҡа ауыр-ауыр кирбестәр, балсыҡ, эзбиз ташый. Эргәлә ферма ла һалалар, унда ла ҡул көсө кәрәк...

Шулай ике ҡыш, ике йәйҙе үткәреп, Сажиҙә урта мәктәпте тамамлай. Артабан бик уҡығыһы килә. Кем булырға? Ҡустыларын ҡулдан төшөрмәй ҡарашып үҫтергәнгәме, медицинаны һайлай. Ләкин әсәһенең ҡыҙын ҡайҙалыр ебәргеһе килмәй — донъя баҫып бара бит. Шулай ҙа ҡыҙ Өфөгә юллана. Һынауҙарҙы урыҫ телендә алалар. Нишләп башҡортса ярамайҙыр — аптырай ҡыҙ. Урыҫса һынау тота алмабыҙ тигәндәр берәм-берәм ауылдарына тарала, тормоштоң әсеһен татырға өлгөргән Сажиҙә иһә имтиханға инә, комиссия ағзаларына ярып әйтә: «Беҙ башҡортса уҡып килдек, ниңә урыҫса имтихан алаһығыҙ?» Араларынан берәү башҡортсалап-татарсалап һораштыра башлай. Һуңынан башҡаларға әйтә: «Әйҙә, өслө ҡуйыйыҡ». Сажиҙә ризалашмай, үҙ хәлдәрен һөйләп бирә. Комиссия ағзалары ахырҙа ҡыҙға институтта уҡырға фатиха бирә.



*Сажиҙә Мөслимова*

Ул йылдарҙа уҡыу түләүле. Әсәһе ебәрһенме лә, балаларынан ваз кискән атаһы бирһенме ул аҡсаны?! Юҡ, эшкә төшөргә кәрәк... Бер

ҡайҙа ла алмайҙар, ун алтыһы тулмаған...

Аҡсаһы ла, йәшәргә урыны ла юҡ. Йоҡа ғына кейемле ҡыҙ сумаҙанын күтәреп институтҡа килә, ләкин индермәйҙәр. Урамда йөрөштөрә, сумаҙанына ултырып серем дә иткеләй. Шулай бер нисә көн ҡабатлана. Быға иғтибар итеп, янына Рима Ғариф ҡыҙы Әсәҙуллина апай килә.

— Ҡыҙым, нишләп йөрөйһөң былай?

— Ял итәм, — тигән була Сажиҙә.

— Әйҙә, инәйек әле кафедраға, өшөгәнһең, туңғанһың бит, — тип үҙ артынан эйәртә. — Тәҙрәнән ҡарайым да һине күрәм. Йә, һөйләп ебәр әле хәлдәреңде...

Рима Ғарифовна декан менән һөйләшеп, Сажиҙәне уҡырға урынлаштыра, сөнки яңы йылдан түләү бөтөрөләсәк икән. Ләкин стипендия фатирҙа йәшәүгә лә етмәйәсәк. Ә ятаҡ һуғышта һәләк булған яугирҙәрҙең балаларына бирелә. Ахырҙа ҡыҙҙы медицина училищеһына ебәрәләр. Бында уны лаборантка итеп эшкә алалар. Бөтә көсөн уҡыуға бирә ул.

Сажиҙә Сәмиғулла ҡыҙы Мөслимованың ана шулай серәшеп уҡырға тырышыуы, ҡыйынлыҡтар кисереүе, бер эштән дә ҡурҡмауы тураһында уйланаһың да кешенең белемгә ынтылышына хайран ҡалаһың. Хәҙерге ҡайһы бер йәштәрҙең ауырлыҡтар алдында баҙап ҡалыуы, атай-әсәй елкәһендә ҡартайғансы йәшәүе, зарланырға ятыуы һымаҡ күренештәр йәнә аптырата.



*Сажиҙә Сәмиғулла ҡыҙы әсәһе Ғәшүрә апай, апаһы Миңзифа һәм иң кесе кустыһы Рәшит менән*

1957 йылда училищены тамамлағас, Сажиҙә Мөслимова «Һаҡмар» совхозының ун биш карауатлыҡ дауаханаһын ҡабул итә. Унда үҙенән алда эшләгән мәрйә хатта ҡыуана, ике сәғәттән машинаға тейәнеп сығып һыҙа. «Ниһайәт көтөп алдым бындай бәхетле көндө!» — тип һөйөнә ул... Бына шулай, берәү эш тапҡанға, икенсеһе ауылдан киткәнгә шатлана! Район үҙәгенән 160 саҡырым алыҫлыҡтағы был дауаханала Сажиҙә Мөслимоваға гинеколог та, терапевт та, хирург та булырға тура килә. Һуҡыр эсәккә тәүге операцияны һаман иҫендә уның. Ауыл кешеһе ҡыҙыҡ бит: көрсөккә килеп терәлгәс кенә табипҡа мөрәжәғәт итә, ә ярҙамды ашығыс күрһәтергә кәрәк. Нишләһен йәш белгес? Үҙе тотона. Көсө етмәгән осраҡта күрше Ырымбур өлкәһе табиптарына ла барып ялына.

Бер йылдан Мөслимованы Абзанға рентген кабинетына лаборант итеп күсерәләр, ләкин ҡыҙҙың артабан уҡығыһы килә. Йәйҙе көтөп ала ла, ялға сығып, Өфөгә юллана. Төрлө дауаханаларҙа эшләп ала, медицина институтына барып инә. Дүртенсе курста тормошҡа сыға. Улы тыуғас, балалар баҡсаһына эшкә урынлаша. Ире бик һәйбәт, ҡатынын аңлаған кеше булып сыға, уҡыуын тамамларға ярҙам итә. Институттан һуң Мөслимова имсәк балалар йортона тәғәйенләнә, аҙаҡ баш табип вазифаһын атҡара.

Ябай ауыл ҡыҙының тормош юлы тураһында яҙғанда уның характеры ныҡлығына, ныҡышмалылығына айырыуса иғтибар итәһең. Ауырлыҡҡа баш эймәгәндәр, яҙмыштарын үҙҙәре яҙғандар, әлбиттә, бер Мөслимова ғына түгел. Әммә Сажиҙә апай барыбер ҙә ҙур хөрмәт, ихтирам уята. Балалар менән эшләгәс, ошо өлкәлә ғилми эш менән дә шөғөлләнеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Тыу-

мыштан нервылары ҡаҡшаған имсәк балалар йортона килеп эләккән сабыйҙар йыш ауырый, уларҙы һауыҡтырырға, ысын кешеләр тәрбиәләргә кәрәк... Иммунология буйынса 1978 йылда кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай Сажиҙә. Институтҡа туҡланыу гигиенаһы кафедраһына эшкә килә, бер үк ваҡытта Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министрлығында туҡланыу буйынса баш белгес вазифаһын үтәй.

Сажиҙә Мөслимованың табип һәм ғалимә булараҡ иң ҙур уңыштары — балалар һаулығын нығытыу йүнәлешендәге фәнни хеҙмәттәре һәм ғәмәли эштәре. Медицина институтында педиатрия кафедраһының балалар ауырыуҙары бүлегендә уҡыта. Эшләй башлау менән 3-сө балалар поликлиникаһын һәм 302-се баҡсаны тәжрибә базаһына әйләндерә, студенттарҙы шунда практикаға йөрөтә, унан һуң Республика балалар клиник дауаханаһында уҡытыу һәм ауырыуҙарҙы ҡарау эштәрен дауам итә. Ул кафедраның төп базаһы булып иҫәпләнә. Сабыйҙарҙы сәләмәтләндереү, уларҙың оҙайлы ауырыуҙарға ҡаршы тороуы, насар экология тәьҫиренән арыныу кеүек мәсьәләләр тәрән өйрәнелә. Шундай һығымтаға киленә: балалар үҙебеҙҙә — Башҡортостанда үҫтерелгән аҙыҡ-түлек менән туҡланырға, сит илдәрҙән килгән һөт һәм ҡатнаш аҙыҡтар, шоколад-йогурттар, ярым әҙер бутҡалар, майҙар рационға индерелмәҫкә тейеш. Үҙ еребеҙҙә үҫкән, билдәле ваҡытта йыйып алынған һәм дөрөҫ киптерелгән үләндәрҙән сәй айырыуса файҙалы. Балаларға кислород коктейле, массаж, һауа һәм ҡояш ванналары, бассейн тәҡдим ителә. Улар ультрафиолет нурҙарҙа ҡойона.

Сажиҙә Мөслимова «Әсә һәм бала» программаһын тормошҡа ашырыу йәһәтенән тәүҙә бер, аҙаҡ дүрт төркөм ойоштора. Шулай итеп унда ете төркөм булып, 80 бала сәләмәтлеген нығытҡан.

Табибә әле лә Башҡорт дәүләт медицина университетында уҡыта, Республика балалар клиник дауаханаһының тыумыштан ауырыу балалар хирургияһы бүлегендә кәңәшсе. Уның күҙәтеүе аҫтында имсәк балаларҙан алып 16-18 йәшкәсә үҫмерҙәр дауалана. Мөслимованы иң борсоғаны — элек өлкәндәрҙә генә осраған сирҙәрҙең хәҙер сабыйҙарҙа ла табылыуы, ата-әсәләрҙең балалар өсөн яуаплыҙлығы, тәмәке тартыу, араҡы эсеү, СПИД һәм башҡа насар ауырыуҙарҙың ишәйеүе.

— Сит ил аҙығы ашап ағыуланған бер йәшлек балала ашҡаҙан шеше табылды, — тип һөйләй табибә. — Иң ҡурҡынысы — һәр балаға 4-5 диагноз ҡуйылыуы. Бронхит икән, гастриты ла, аллергияһы ла, дисбактериоз да була. Һалҡын тейеүҙе элек өс аҙнала дауалаһаҡ, хәҙер өс ай хитланабыҙ. Беренсе синыф уҡыусыларында остеохондроз нишләп булырға тейеш, мәҫәлән? Хәрәкәт етешмәй, телевизор алдында оҙаҡ ултыра, тимәк... Өлкәндәрҙең тәмәкене, араҡыны йәштән үк ҡулланыуы, боҙоҡ тормош алып барыу, экологик хәлдең насарайыуы иң элек балаларҙа сағылыш таба. Минең әйткәндәрҙән шул аңлашылырға тейеш: кескәйҙәребеҙгә сит ил аҙыҡтары зарарлы, сәләмәт тормош алып барыу зарур!

Пульмонология буйынса конференцияларҙа ҡатнашып, Сажиҙә Мөслимова шифалы туҡланыу мәсьәләләрен халыҡ-ара кимәлдә лә күтәргән табиптарҙан. Был өлкәлә 130-лап ғилми хеҙмәте бар. «Һаулыҡ — ҙур байлыҡ» телетапшырыуҙарын да алып барҙы ул, «Башҡортостан ҡыҙы» журналының мөхәрририәт ағзаһы булараҡ та әүҙем сығыш яһаны.

Элек СССР-ҙа әсәләр һәм балалар үлемен булдырмауға арналған десант ойошторалар ине. С.Мөслимова Эвенк милли округында шулай бер ай буйы эшләп ҡайтҡайны. Иренең эше буйынса Берләшкән Ғәрәп Эмираттарында (заманында Египет Республикаһын шулай атайҙар ине) китергә тура килгәс, Рәсәй илселеге янында педиатр вазифаһын үтәне, ғәрәптәргә лә тейҙе изгелеге.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте 1987 йылда «Сәләмәт тормош — һаулыҡ нигеҙе» тигән бәҫле генә йыйынтыҡ сығарғайны. Сажиҙә ханымдың унда «Туҡланыу һәм һаулыҡ» исемле ғилми хеҙмәте бар, ул бик мауыҡтырғыс. Һаулыҡ һағында бына ҡырҡ биш йыл самаһы эшләгән Сажиҙә Мөслимованың тормош юлы — фәһем дә, өлгө лә алырлыҡ.